**БАШҠОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАҺЫ**
**ХӘЙБУЛЛА РАЙОНЫ МУНИЦИПАЛЬ РАЙОНЫ**
**ҮҘӘКЛӘШТЕРЕЛГӘН КИТАПХАНАЛАР СИСТЕМАҺЫ**
**МУНИЦИПАЛЬ АВТОНОМ УЧРЕЖДЕНИЕҺЫ**
**ҮҘӘК РАЙОН КИТАПХАНАҺЫ**
**БАШҠОРТ ӘҘӘБИӘТЕ ҺӘМ ТЫУҒАН ЯҠТЫ ӨЙРӘНЕҮ БҮЛЕГЕ**

# Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәримдең тормош юлы һәм ижадына арналған әҙәби кисә «Мостай илендә»

**Сценарий авторҙары:**
*Рәмилә Файзуллина,*
*башҡорт әҙәбиәте һәм*
*тыуған яҡты өйрәнеү бүлеге мөдире,*
*Лира Такалова,*
*башҡорт әҙәбиәте һәм*
*тыуған яҡты өйрәнеү бүлеге китапханасыһы*

**Аҡъяр-2023 й.**

**Маҡсат:** Башҡортостандың халыҡ шағиры М. Кәримдең тормош юлы һәм ижады менән таныштырыу, әҙәбиәткә ҡарата ҡыҙыҡһыныу уятыу, тыуған ергә һөйөү тәрбиәләү, илһөйәрлек сифаттарын һәм уҡыусыларҙың хәтерен, иғтибарлылығын, фекерләү ҡеүәһен үҫтереү.

**Йыһазландырыу:** «Халҡым хазинаһы» исемле китап күргәҙмәһе, компьютер, телевизор, слайд-презентация, видеоматериалдар.

**1-се алып барыусы:** Хәйерле көн, хөрмәтле уҡыусылар, уҡытыусылар!

**2-се алып барыусы:** Һаумыһығыҙ, хөрмәтле дуҫтар! Һеҙҙе Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәримдең тормош юлы һәм ижадына арналған «Мостай илендә» исемле әҙәби кисәлә күреүебеҙгә шатбыҙ.

Башҡортостан ере! Күпме таланттар, аҡыл эйәләре, яҙыусылар, ғәйрәтле ер хужалары көс һәм илһам алған ошо Башҡортостан тупрағынан!

Тыуған илен, ғәзиз телен яратҡан, әҙәбиәткә, халҡыбыҙ тарихына ғашиҡ һәм тоғро булып, уның хаҡына үҙен аямай хеҙмәт иткән, илгә ҡот өҫтәгән меңәрләгән рухлы ир-уҙамандарыбыҙ һәр осорҙа ла һоҡланыу тойғоһо уята, мәңгелеккә хәтерҙә ҡала. Шундай арҙаҡлы шәхестәребеҙҙең береһе милләтебеҙҙең рухи йондоҙо, Башҡортостандың халыҡ шағиры, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, Социалистик Хеҙмәт Геройы, Бөйөк Ватан һуғышы ветераны Мостай Сафа улы Кәримов.

**1-се алып барыусы:** Хөрмәтле уҡыусылар, әҙәби кисәлә талантлы ҡәләм оҫтаһы Мостай Кәримдең данлы тормош юлы, ижад һуҡмағы менән танышырһығыҙ. Әҙәби кисә «Һорау-яуап» формаһында барасаҡ, был алымды ҡулланып, һеҙгә үҙ аллы эшләргә, фекерләргә мөмкинселек тыуҙырабыҙ.

**2-се алып барыусы:** Мостафа Сафа улы Кәримов бай тарихы, мәғрүр тауҙары, сылтырап аҡҡан шишмәләре, саф һыулы йылғалары, гүзәл тәбиғәте менән дан тотҡан Башҡортостандың Келәш ауылында урта хәлле крәҫтиән ғаиләһендә тыуған.

***Һорау: Келәш ауылы ҡайһы районда урынлашҡан? Уҡыусылар һеҙгә бер нисә вариант тәҡдим ителә.***

Слайдҡа күҙ һалайыҡ: А. Хәйбулла районы, Б. Ҡырмыҫҡалы районы,
В. Шишмә районы.

*(Уҡыусыларҙың яуаптарынан һуң киләһе слайдты ҡарау: Башҡортостан картаһын һәм Шишимә районын күрһәтеү).*

**1-се алып барыусы:** 2019 йылда Республика халҡы Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәримдең тыуыуына 100 йыл тулыуҙы билдәләнек.

***Һорау: Мостай Кәрим нисәнсе йылда тыуған?***

Слайд: А. 1917 йыл, Б. 1919 йыл, В. 1920 йыл.

*(Уҡыусыларҙың яуаптары. Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәрим (Мостафа Сафа улы Кәримов) 1919 йылдың 20 октябрендә тыуған).*

**2-се алып барыусы:** Мостафа Кәрим  бик ишле ғаиләлә эш һөйөүсән һәм инсафлы бала булып үҫә. Буласаҡ яҙыусы бигерәк тә өлкән әсәһе һөйләгән әкиәттәрҙе, легенда, риүәйәттәрҙе, ҡойған йомаҡтарҙы тыңларға ярата. Иҫ киткес мауыҡтырғыс башҡорт халыҡ ижады уның хыялын байытырға ярҙам итә. Әҙип үҙенең ҡыҙыҡлы, бәхетле бала сағы, үҫмер йылдары тураһында автобиографик әҫәр яҙа.

***Һорау: автобиографик повесть нисек атала?***

*(Уҡыусыларҙың яуаптарынан һуң слайдта «Оҙон-оҙаҡ бала саҡ» китабын күрһәтергә).*

**1-се алып барыусы:** Кинорежиссер, Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Булат Йосопов 2005 йылда әҫәр буйынса фильм төшөрә. *(слайдта фильмдың фотофрагменттарын күрһәтергә).*

**«Оҙон-оҙаҡ бала саҡ» фильмынан өҙөк ҡарарға.**

**2-се алып барыусы:** Оло инәһе Мостай Кәримде бала сағында һәр саҡ «Синнайым» тип яратҡан.  Нисек уйлайһығыҙ был һүҙ нимәне аңлата?

Эйе, дөрөҫ ул рустың «Ценный» тигән һүҙенән алынған.

**1-се алып барыусы:** Буласаҡ яҙыусы уҡыуға, яҙыуға өйрәнеү менән үк төрлө шиғырҙар яҙа башлай. Тәүге шиғырҙары «Йәш төҙөүсе», «Ленинсы» гәзиттәрендә баҫыла. Тыуған ауылында тулы булмаған урта мәктәпте тамамлағас, Өфө ҡалаһына уҡырға килә. Тап Өфөгә килгәс буласаҡ шағир бик әүҙем яҙыша башлай. Мостай Кәримдең 1938 йылда беренсе китабы донъяға күрә.

***Һорау: Мостай Кәримдең беренсе китабы нисек атала?***

Слайдта: А. Отряд ҡуҙғалды, Б. Ярлыҡау, В. Яҙғы тауыштар.

*(Уҡыусыларҙың яуаптарынан һуң «Отряд ҡуҙғалды» китабын күрһәтеү.1938 йылда Мостай Кәримдең Вәли Нафиҡов менән бергә яҙылған «Отряд ҡуҙғалды» исемле беренсе китабы донъяға күрә).*

Шағирҙың 1941 йылда сыҡҡан «Яҙғы тауыштар» исемле икенсе шиғырҙар йыйынтығында иһә йәшлек ялҡыны, йәшәү йәмен тойоу хисе, күңел көрлөгө бөркөлөп тора. Уның оптимистик поэзияһының тормошто раҫлар һәм данлар яҙғы тауыштары көсәйә. Йәш шағирҙың Бөйөк Ватан һуғышына тиклемге поэзияһын уның башланғыс ижад осоро тип һанарға мөмкин, эҙләнеү, үҙ ҡәләм көсөн һынап ҡарау, шымарыу йылдары.

**2-се алып барыусы:** Бөйөк Ватан һуғышы башланыу менән Мостай Кәрим армия сафына алына. Фронтҡа китерҙән алда яҙылған «Мин фронтҡа китәм, иптәштәр!» тигән шиғыры иңгә шинель һалған совет кешеләренең ил алдындағы поэтик анты булып яңғыраны.

Мостай Кәрим аяуһыҙ һуғышта ҡаты яраланып, туғыҙ ай госпиталдә ята. Фашистың снаряд ярсығы шағирҙың комсомол билетын тишеп йөрәгенән бер нисә мм ғына ситтәрәк үтә. 19 йыл үткәс Мостай Кәрим был хаҡта шиғыр яҙа.

***Һорау: шиғырҙың исемен атағыҙ.***

Слайдта: А. Өсөнсө көн тоташ ҡар яуа, Б. Мин фронтҡа китәм, иптәштәр! В. Үлмәҫбай.
*(Уҡыусыларҙың яуаптарынан һуң шиғырҙы укырға)*

**Йырсы, РСФСР-ҙың атҡаҙанған, Башҡорт АССР-ының һәм Татарстандың халыҡ артисы Фәриҙә Ҡудашева башҡарыуында йыр «Өсөнсө көн тоташ ҡар яуа».**

**1-се алып барыусы:** Аяҡҡа быҫыу менән Мостай Кәрим фронтҡа кире юллана, фронт гәзиттәрендә эшләй. Украинаны, Румынияны, Болгарияны, Венгрияны азат итеүҙә ҡатнаша. Һуғышта күрһәткән батырлыҡтары өсөн Икенсе дәрәжә Ватан һуғышы, Ҡыҙыл Йондоҙ ордендары һәм миҙалдар менән бүләкләнә.

***Һорау: Мостай Кәрим Еңеү көнөн 1945 йылдың 9 майын ҡайһы ҡалала ҡаршылай?***

Слайдта: А. Австрия, Вена, Б. Берлин, В. Одесса.

*(Яуапты слайд аша тулыландырырға).*

**2-се алып барыусы:** Мостай Кәрим ниндәй генә әҙәби жанрға тотонмаһын, һәр береһендә рәхәтләнеп яҙа. Булһынмы ул балалар, йәштәр, өлкәндәр өсөн, бер уҡыусыһын да иғтибарһыҙ ҡалдырмай. Төрлө тематикалы, тиҫтәләгән шиғырҙар, хикәйә һәм повестар, пьеса һәм поэмалар – һәр жанрҙа үҙ уҡыусыһын тапҡан әҙәбиәтебеҙҙең юғары рухлы әҙибе ул.

**«Мәңге беҙҙең хәтерҙә»**

**1-се алып барыусы:** Башҡортостандың халыҡ шағиры, Социалистик Хеҙмәт Геройы, Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, Башҡортостандың Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Мостафа Сафа улы Кәримовтың исемен мәңгеләштереү маҡсатында күп эштәр эшләнә. Бигерәк тә Мостай Кәримдең тыуыуына 100 йыл тулыуға ҡарата 2019 йылда республика күләмендә төрлө саралар ойошторолдо.

Билдәле яҡташыбыҙ, күренекле режиссёр, продюсер, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, Башҡортостан Республикаһының Шәйехзада Бабич исемендәге йәштәр дәүләт премияһы лауреаты Айнур Асҡаров Мостай Кәримдең 100 йыллыҡ юбилейы айҡанлы яҙыусының повесы буйынса фильм төшөрҙө.

***Һорау: Яҙыусының ниндәй әҫәре буйынса фильм төшөрә һәм ул нисек атала?***

Слайдта: А. Беҙҙең өйҙөң йәме, Б. Өс таған, В. Оҙон-оҙаҡ бала саҡ.

«Өс таған» фильмын 2018 йылда төшөрә башлайҙар. Уның күп өлөшө Ғафури районының Толпар ауылында төшөрөлә. «Өс таған» фильмы Ҡытайҙа 15-се Халыҡ-ара балалар киноһы фестивалендә иң яҡшы балалар фильмы тип танылды. Шулай уҡ, «Өс таған» илебеҙҙә 20 иң шәп кино иҫәбенә ингән.

**Фильмдан өҙөк ҡарарға.**

**2-се алып барыусы:** Мостай Кәримдең тыуыуына 100 йыл тулыуы айҡанлы танылған актер, күренекле Рәсәй режиссеры Александр Галибин яҙыусының повесы буйынса «Һеңлекәш» фильмын төшөрҙө.

***Һорау: Фильм Мостай Кәримдең ниндәй повесы буйынса төшөрөлгән?***

Слайдта: А. Беҙҙең өйҙөң йәме, Б. Өс таған, В. Оҙон-оҙаҡ бала саҡ.

Фильм Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәримдең «Беҙҙең өйҙөң йәме» тигән повесына буйынса төшөрөлгән.
«Һеңлекәш» фильмында яҡташыбыҙ, Мәжит Ғафури исемендәге драма театрының актеры, Шәйехзада Бабич исемендәге йәштәр премияһы лауреаты Фәнис Рәхмәтов һәм уның улы Йософ ҡатнашыуы беҙҙең өсөн ҡыуаныслы.

**Фильмдан өҙөк ҡарарға.**

***Һорау: Укыусылар, нисәнсе йылда «Өфө» халык-ара аэропортына Мостай Кәрим исеме бирелгән.***

Слайдта: А. 2019 йылда, Б. 2020 йылда, В. 2022 йылда.

Рәсәй Президенты В. Путин Указы менән 2019 йылдың 31 майында «Өфө» аэропортына Мостай Кәрим исеме бирелде.

***Һорау: Ниндәй театр Мостай Кәрим исемен йөрөтә?***

Слайдта: А. Милли йәштәр театры, Б. Башҡорт дәүләт драма театры, В. Дәүләт опера һәм балет театры.

(2006 йылдың ғинуарында Милли йәштәр театрына Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәрим исеме бирелә).

**1-се алып барыусы:** *(Слайдтан Мостай Кәримгә арналған һәйкәлде күрһәтергә)*. Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәримгә арналған һәйкәл. Был ҡатмарлы композицияла Урал тауҙары буйында ултырған шағир һүрәтләнгән.

***Һорау: Мостай Кәримгә һәйкәл ҡайһы ҡалала ҡуйылған?***

*Слайдта: А. Ҡазан ҡалаһында, Б. Өфө ҡалаһында, В. Стәрлетамаҡ ҡалаһында.*

Мостай Кәрим һәйкәле Татарстанда Ҡазан ҡалаһында шағир исемен йөрөткән скверҙа урынлашҡан. Монументтың скульпторы - Рәсәй рәссамдар берлеге рәйесе Андрей Ковальчук. Һәйкәлдең маҡсаты: Татарстан менән Башҡортостан Республикалары араһында хеҙмәттәшлекте үҫтереү, халыҡтар дуҫлығын нығытыу булып тора.

**2-се алып барыусы:** Чегем тарлауығындағы 3555 метр бейеклектәге түбәгә Мостай Кәрим исеме бирелгән.

***Һорау: Был түбә ҡайһы республикала урынлашҡан?***

*Слайдта: А. Башҡортостан, Б. Татарстан, В. Ҡабарҙы-Балкар республикаһында.*

Ҡабарҙы-Балкар Республикаһында Кавказ һыртында Чегем тарлауығындағы 3555 метр бейеклектәге түбәгә Мостай Кәрим исеме бирелгән.

Шулай уҡ, республикабыҙҙың һәм илебеҙҙең төрлө төбәктәрендә мәктәп, гимназия, проспект, сквер, урамдар милләтебеҙҙең рухи йондоҙо Мостай Кәрим исемен йөрөтә.

**«Халҡым хазинаһы» китап күргәҙмәһенә байҡау яһау**

**1-се алып барыусы:** Халҡына алтын хазина ҡалдырған оло әҙиптең әҫәрҙәрен уҡыған һайын унан тарихилыҡ, тыуған ерҙе, туған халыҡты тәрән һөйөү, Ватанын сикһеҙ яратыуын тояһың. Әҙәбиәтте Мостай Кәрим милли аң, тәрбиә, киләсәк быуын алдында яуаплылыҡ, рух тойғоho тәрбиәләү сараһы итеп күрҙе. Ижадын ғына түгел, үҙенең бар йәшәү рәүешен ошо ауыр һәм яуаплы бурысҡа арнаны, ихлас янып эшләне ул.

**2-се алып барыусы:** Башҡорт әҙәбиәте классигы, шағир, драматург, публицист, Бөйөк Ватан һуғышы ветераны, йәмәғәт эшмәкәре Мостай Кәримдең исеме алтын хәрефтәр менән Рәсәй һәм донъя әҙәбиәте тарихында яҙылған. Уның әҫәрҙәре һәр ваҡыт тәрән мәғәнәһе, ихласлығы, матурлығы һәм бай телле, ябайлығы менән айырылып тора. Илебеҙ күгендә яҡты йондоҙ булып балҡыған бөйөк шағирыбыҙҙың ижадына битараф булмайыҡ, әҫәрҙәрен уҡыйыҡ, рух ныҡлығы туплайыҡ. Һау булығыҙ! Осрашҡанға тиклем!